# ”БЕР КЕМ ДӘ, БЕР НӘМӘ ЛӘ ОНОТОЛМАЙ...”



*Ольга Берггольц*

Ольга Берггольцтың был һүҙҙәре илебеҙ тарихына һәм халыҡ күңеленә мәңге онотолмаҫ өсөн уйып яҙылған. Уны яҙмыш иркәләмәй. Ғорурлығы өсөн дә, таланты өсөн дә уға күп ғазаптар кисерергә тура килә. Ләкин Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, фашист илбаҫарҙары Ленинградты ҡамап алған ҡурҡыныс көндәрҙә Ольга Берггольц, үҙенең барлыҡ фажиғәләрен онотоп, халыҡты рухландырыусы, уны түҙемлеккә саҡырыусы һәм көрәшкә әйҙәүсе тере рупорға әйләнә. Уның радио аша яңғыраған ялҡынлы сығыштарын, шиғырҙарын һәр бер Ленинград кешеһе, барлыҡ ил халҡы көтөп ала. Шағир Павел Антокольскийҙың Ольга Берггольцҡа арналған бер шиғырында шундай юлдар бар:

Йәшен булып, егәрле ел булып,  
Һинең оран йәнде ялманы.  
Һәр бер кеше уны көтөп алды,  
Һәр бер йөрәк уны аңланы.

Ленинград рәссамы Мария Алексеевна Самохвалова Павел Антокольскийҙың ”Дүртенсе үлсәм” (”Четвертое измерение”) йыйынтығынан (ул китап, моғайын, авторҙың автографы менән Ольга Берггольцҡа бүләк ителгән булғандыр — **Ә.Т.**) шағирәнең үҙ ҡулы менән күсереп алынған был шиғырҙы миңә ебәргәйне. Мария Алексеевна менән беҙ 1992 йылда Комарово ижад йортонда танышҡайныҡ. Ул Ольга Берггольцтың бер нисә портретының авторы, шағирәнең тормошо, фажиғәле яҙмышы менән дә яҡындан таныш ине. Миңә Ольга Берггольцтың бер нисә портретын, шул иҫәптән Ленинградты обороналауҙа ҡатнашҡан өсөн бирелгән миҙалын күкрәгенә тағып төшкән фотоһын бүләк итте. ”Ольга үҙенең был миҙалы менән бик тә ғорурлана ине”, — тип яҙҙы ул. Ә минең тәржемәләр менән шөғөлләнеүемде белгәс, хатта шағирәнең үҙенә бүләк ителгән автографлы китабын почта аша һалып ебәрҙе. ”Миндә уның ике томы бар, ә был китап һеҙгә эш өсөн кәрәк”, — тип киң күңеллелек күрһәтте рәссам.

Быйыл Ольга Берггольцтың тыуыуына 95 йыл тулды. Башҡа сағыу таланттарҙыҡы кеүек, уның тормош юлы ла үкенестәр, фажиғәләр менән тулы. Ләкин ”Бер кем дә, бер нәмә лә онотолмай”. Шағирәнең героик хеҙмәте лә, фажиғәле тормош юлы ла, әрнеткес мөхәббәте лә — шиғырҙарында, халыҡ күңелендә. Күп тарафтарҙа яратып уҡылған ”Ватандаш” журналына Ольга Берггольцтың үҙем тәржемәләгән бер нисә шиғырын тәҡдим итәм.

*Әнисә Таһирова.*

***Ольга БЕРГГОЛЬЦ***

## Госпиталдә

*Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Ленинградта*
*35 мең ҡатын-ҡыҙ дружина ағзаһы булырға теләк белдереп,*
*Ҡыҙыл Тәре йәмғиәтенә мөрәжәғәт итә.*

Һалдат үрһәләнә. Яралары
Төн буйына уға йоҡо бирмәй.
Һаташа ул. Һыҙланыуҙан алйып,
Йәнгә ғәзиз яҡындарын эҙләй:
— Әсәй, кил яныма, ҡайҙа һуң һин?!
Йәп-йәш кенә шәфҡәт туташы
Килеп етә йәһәт уҡталып:
— Мин янында, мин бындамын, улым!

Һалдат шул саҡ еңеп ғазаптарын,
Күҙ алдында әсә йөҙөн шәйләп,
Әйтә: — Һин бындамы? Әсәй, рәхмәт!
Ә ҡайҙа һуң минең ҡатыным?
Һәм яңынан шәфҡәт туташы:
— Мин бында! — тип килә талпынып,
Мин бындамын — һинең ҡатының.
Булам һеңлең, булам әсәйең,
Беҙгә кәрәк һинең йәшәүең.

Ватан һаҡсылары янында
Беҙ барыбыҙ һәр саҡ тоғро терәк.
Сөнки һеҙ бит ғәзиз Ил-төйәккә,
Ерҙә тормош ҡороу өсөн кәрәк.

Һаташыуҙар тиҙҙән артҡа сигә,
Ҡайта һиллек, ҡайта тыныслыҡ.
Һин йәшәрһең. Бындай тоғролоҡто
Еңә алыр көстәр ерҙә юҡ.

*1941 йыл.*

***

Ишетәһеңме? Яҙғы етеҙ елдәр
Сабып йөрөй яҡты баҡсала.
Хәтерлә һин, әле был донъяла
Бар бит юлдар, ҡырҙар, киң дала.

Бүленһә лә беҙҙең барыр һуҡмаҡ
Блокадала ҡалған ҡалала,

Ҡараштарым, гүйә, киң ҡырҙарҙың
Матурлығын байҡап бағалар.
Күрәм Мазай Ҡартты: ҡуяндары
Тейәлгәндәр кәмә түренә...
Ә был ҡалала юҡ бер кейек тә,
Кешеләр ҙә саҡ-саҡ тереләр.

Киске уттар ҙа юҡ,
Һәр бер йорттоң
Барлыҡ тәҙрәләре томала.
Кешеһе юҡ йортта ғына ҡапыл
Бер мәлгә ут баҙлап юғала.

Был мәл беҙгә шундай белеү кәрәк
Илем нисек һулыш алыуын,
Элеккесә күлдәр ташыуын,
Ҡалаларҙа уттар балҡыуын.

Белеү кәрәк: барыһы ҡабат ҡайтыр.
Был мәхшәрҙәр ҡалыр бик алыҫ, —
Мин күрәштә еңә алмаҫ инем,
Булмағанда ошо ышаныс!

Ленинград, 1943 йыл.



## Блокада ҡарлуғасы

*Ҡамауҙа ҡалған Ленинград халҡы сукышында хат илтеүсе ҡарлуғасты һынландырған жетонды түштәренә тағып йөрөткән.*

Үткәндәрҙе иҫләп, йөрәк өткән
Ҡайғы, шатлыҡтарҙы барлаһам,
Ут-ҡулсала ҡалған ҡалабыҙҙың
Бер яҙына ҡайтам мин һаман.

Кескәй генә ҡалай ҡарлуғасты
Мин дә гел түшемдә йөрөттөм.
Мин дә һәр көн изге хәбәр көттөм,
Йәнгә дауа булыр хат көттөм.

Беҙ үҙебеҙ уны уйлап таптыҡ —
Ҡарлуғасты — өмөт билдәһен.
Белә инек беҙгә бары ҡоштар,
Самолеттар ғына етәһен.

...Был яҙҙан һуң күпме хаттар алдым,
Тик ниңәлер ғүмер буйына
Мин өҙөлөп, һағышланып көткән
Хат килмәгән төҫлө тойола.

Кем яҙырға тейеш ине уны?
Еңеү яҙындағы бер моңмо?
Әллә ғүмер буйы мин көтөп тә
Күрмәй, белмәй ҡалған дуҫыммы?

Мин таң йылмайыуын көткән кеүек,
Ошо хатты көтәм көн һайын.
Урау юлдар менән йөрөйҙөр ул,
Табалмайҙыр мине, моғайын.

Бер көн көтмәгәндә хайран итеп,
Йәнем болоҡһоуын таратып,
Һуғыш утын ярып үткән шул хат
Килер төҫлө, елпеп ҡанатын.

Тере ялҡындар һип йөрәгемә,
Хыял-уйымдағы хат-ҡанат.
Һин дәһшәтле, утлы ҡулсалағы
Ҡарлуғастан ҡалған аманат.

*1945 йыл.*





## Минеӊ йортом

Блокадала саҡта китеп барҙым
Миңә төйәк булған ошо йорттан.
Әле бына тәҙрә уттарына,
Байрам төҫтәренә ҡарап торам.
Хәтерләйҙәр микән тәҙрәләр:
Ул саҡ шартлай ине йәҙрәләр.

Ҡайһылай ҙа беҙ тырыша инек
Ошо тәҙрәләрҙе томаларға.
Гүйә, томалана барлыҡ донъя...
Аҙаҡ килеп ишек шаҡый хужа.
Һыуға төшкән кеүек ғәйеп булды,
Бер көн алып киткәс уны нужа.

Таныш бүлмәләрҙең ишектәрен
Бөгөн кем асалыр — мин белмәйем.
Шәйләнем тик бер мәл беҙ һайлаған
Таныш обойҙарҙың зәңгәр йәмен...

Тәҙрәләге яҡты, байрам төҫө
Күңелдәргә нурын һибә хәҙер.
Мин ышанам: изге, саф теләкле,
Шәп кешеләр бында йәшәйҙәрҙер.

Балалар ҙа, гөрләп, тауыш бирә,
Мөхәббәтле йәш бер һын күренә.
Почтальондар шат хәбәрҙәр менән
Үтәләрҙер яҡты йорт түренә.

Шаулап, гөрләп килгән бер төркөмдөң
Ошо йортҡа йүнәлгәнен күрҙем.
Беҙ ғазаптар сиккән был төйәккә
Бөгөн, тинем, тик именлек керһен.
Һуғыш тартып алған ҡыуанысты
Яҙмыш һеҙгә тулы килеш бирһен...

Ләкин бер мәл, ҡышҡы һалҡын кистә,
Хәтирәләр өтһә йәнемде,
Бәлки, был йортома килермен мин,
Йөрәгемә төйнәп сәмемде.

Йортом ишеген мин шаҡырмын да,
Буҫағаһы аша уҙырмын.
"Сәғәт нисә?" йәки "Һыу бирегеҙ"
Тиеп, һылтау тапҡан булырмын.

Ғәйеп ташламағыҙ шул сағында,
Аңлағыҙ һеҙ минең хәлемде.
Мин бит бында ут алырға киләм,
Ҡабыҙырға өмөт шәмемде...

*1946 йыл.*

## Айырылыр алдынан

Яҡты хәтирәһен үткән йылдарҙың
Айырылғанда һиңә ҡалдырам.
Тоғролоғом, наҙҙарымды ҡалдырам,
Үткән бәхеткә теҙләнеп табынам:
Байраҡ алдында ант иткән шикелле,
Һөйөү алдында баш эйәм яңынан.

Ҡайтҡан һуҡмаҡтарҙа осратмабыҙ
Уртаҡ ҙур бәхетте ҡабаттан,
Тик ышанам, йырымда ул ҡалыр
Яулап алған изге байраҡтай...

...Ҡарлуғасты һиңә ҡалдырам,
Блокадала беҙ бүленгән саҡта
Ҡайтҡайны ул,
Рәхмәт ҡарлуғасҡа,
Кәйелеп осор тәҙрәң алдынан.

Үҙем менән алам күҙ йәштәрен,
Был тормоштоң хәүефтәрен, ҡайғыларын,
Йылдар аша беҙгә килгән рух ныҡлығын,
Йырланылмайынса ҡалған бишек йырын,
Һуғыш йылдарында уйланылған көйөн.
Тик бер ваҡытта ла ишетмәҫһең уны,
Күңелемдә генә сыңлап йөрөр моңо...
Һау бул, йәнем! Бар йөрәктән һөйә белдем,
Иң ҙур байлыҡ һиңә булыр — шулай бүлдем!

*1956—1960 йылдар.*

***

Ә ниңә мин үкенергә тейеш,
Булғанғамы артыҡ рыяһыҙ?
Һөйөүемә иш булғанға мәллә
Алыш-биреш түгел, саф намыҫ?

Ниңә мине шулай үҙ ҡаршыңда
Бурыслы йән итеп ҡалдырҙың?

Һатмаған һәм һатылмаған өсөн,
Уттарыңда ялмап яндырҙың.

Баҙар хаҡы менән һат һин, әйҙә,
Гәүһәрҙәрен беҙҙең һөйөүҙең.
Мин, тәкәббер ярлы,
Һинән сафмын,
Рух-хыялым менән бейекмен!

***

Төштәремә кер һин, төштәремә,
Ләкин төҫһөҙ бер һын булып түгел.
Һине хыялында йә нур, йә ҡош,
Тормош йәме итеп күрә күңел.

Алыҫтарға китеп юғалдың һин,
Төҫһөҙләнә бара йөҙ-һының.
Күңелемә күпме көл өйөлгән,
Тик һүндермәй һаман ут-ҡуҙын.

Мин юғалттым һине тормошомда,
Моғайын, бар ғәйеп үҙемдә.
Ә мин тере... Кеше ниндәй һере!
Әрһеҙлек бар йәшәү көсөндә.

Төштәремә кер һин, төштәремә,
Ләкин төҫһөҙ бер һын булып түгел.
Һине хыялында йә нур, йә ҡош,
Тормош йәме итеп күрә күңел.

